*Марсель ҠОТЛОҒӘЛЛӘМОВ*

# Ер аҫтында юлдар бар ул

**Тәүге башҡорт геофизиктарының береһе**
**Ҡорбанғәли Аллабирҙиндың тыуыуына 100 йыл**



Замандаштары, хеҙмәттәштәре был кешене Ғәли Бирҙин тип кенә белә ине. XX быуаттың алтмышынсы-етмешенсе йылдарында беҙ республика гәзиттәрендә “геолог Ғ.Бирҙин” тигән имза менән баҫылған мәҡәләләрҙе уҡып бара торғайныҡ. Шуныһы ҡыҙыҡлы: әлеге ағай геологтарҙан бигерәк, шағирҙар, артистар, композиторҙар тураһында яҙа, фекере — киң, теле — үткер.

Кем булды һуң әле Ғәли Бирҙин тигәнебеҙ?

Ағайҙың мулла ҡушҡан исем-шәрифтәре Ҡорбанғәли Ҡотлоәхмәт улы Аллабирҙин булып сыҡты. Уның тормошо — үҙе бер тарих.

Алыҫ Әбйәлил районында, Ирәндектең көнгә ҡараған армыттары, тәбәнәкләнә барып, далаларға ҡушылып киткән урында, Хәлил тигән олуғ башҡорт ауылы ята. Хәҙерге Учалы, Белорет, Баймаҡ, Йылайыр һәм Әбйәлил райондарында XIX быуаттан уҡ һибелмә алтын йыуғандар. Ул алтындың күплеге шул ҡәҙәр булғандыр инде, байлыҡҡа ҡыҙығып, был яҡтарға Ырымбур, Орск тирәләрендә прииск тотоусы эре татар промышленниктары ла килеп еткән. Хәйер, Мәжит Ғафуриҙың “Шағирҙың алтын приискыһында” тигән мәшһүр повесын хәтерләйһегеҙҙер. Әҫәрҙә бит һүҙ бай татар алтынсыһы Закир Рәмиев (шағир Дәрдеменд) менән уның туғаны Сәғит тураһында бара.

Әлбиттә, повеста һүрәтләнгән ваҡиғалар Әбйәлилдәге приискыларҙа булған, тип раҫлау самаһыҙ ҡыйыулыҡ булыр ине. Әммә Дарыуҙы, Ырғайҙы, Орсоҡ һәм башҡа бихисап йылғалар буйҙарында уҙған быуаттың 40-сы йылдарына ҡәҙәр алтын йыуғандар. Исеме үк нимәгәлер кинәйәләп торған Дарыуҙы йылғаһы, Ирәндектең бейек Ҡоҙғонташ менән Ҡуянташ тигән сусаҡтарын икегә ярып килеп сыға ла, Хәлил ауылының ҡап уртаһынан үтеп, Оло Ҡыҙылға барып ҡоя. Оло Ҡыҙылдың артабан Яйыҡҡа ҡушылыуын, Яйыҡтың Каспий диңгеҙенә ҡәҙәр етеүен, ә ошо дарьяның нисәмә дәүләттәр ярҙарын ҡағыуын уйлай китһәң, яҙмыштың Дарыуҙы кеүек бер йотом һыуҙы ла ҡай тарафтарға илтеүенә баш әйләнә. Ә бит кешеләрҙең яҙмышы ла йылғаларҙыҡына оҡшаш. Ейер ризыҡ, эсәр һыу әҙәм балаһын ҡайҙарҙа ғына йөрөтмәй. Яҙмыш ҡайһы саҡта ниндәйҙер боролоштар яһай, әммә Хоҙай эсәр һыуҙан, үтер юлындан һәм таянырлыҡ дуҫтарындан яҙҙырмаһын. Алтынға әйләнеп ҡайтһаҡ, ул Әбйәлил

яҡтарында һәр урында, тиҙәр, тик уны эҙләй һәм йыуып ала белергә кәрәк. Миңә әлеге алтынға бәйле бер легенда ла ишетергә тура килгәйне. Имештер, ҡояш күк көмбәҙе буйынса сәфәрен тамамлап, киске төнәккә ауыша башлауға Ирәндектең киң һәм гүзәл үҙәне буйлап Оло Ҡыҙылға һыулауға тарбаҡ мөгөҙлө мышы төшә икән. Януарҙың йылғаға бер үк мәлдә, һәр көндө төшөүенең сәбәбе шул: көноҙон сәфәр йөрөп арып-талсыҡҡан ҡояш баһадирҙың мөгөҙөндә аҙ ғына ял итеп алырға ғәҙәтләнгән. Мышы ҡояшты мөгөҙөндә тотоп, гәлсәр һыуҙы эсә, ә был мәлдә меңдәрсә саҡҡылар һыуға һибелә һәм, ҡатып, һарғылт-ҡыҙыл алтынға әүерелә. Төбө шундай металл менән түшәлгәнгә лә халыҡ ошо тирәнең иң оло һыуына Ҡыҙыл тип исем биргән, имеш.

Һәр әкиәттә лә бер семтем хәтлем булһа ла хәҡиҡәт табырға мөмкин.

Тәбиғәттең үҙ ағышы, үҙ логикаһы. Ҡайҙалыр һуғыш бара, инҡилаптар ярала, дәүләттәр ҡыйрала, ә әсә йөрәге аҫтындағы сабый, ул мәшәҡәттәрҙе бар тип тә белмәй, донъяға килә. Ҡотлоәхмәт ише фәҡир ғаиләлә тағы бер тамаҡтың хасил булыуы бүтәндәрҙә ниндәй тойғолар уятҡандыр, әммә ата-әсә өсөн үҙең йән өргән сабыйыңдан да ҡәҙерле зат булмай. Кешенең исемендә уның яҙмышы барыбер сағылыш таба, тип раҫлауҙары әллә хаҡ микән? Ҡорбанғәли имсәк ташлап өлгөрөүгә әсәһе гүр эйәһе була. Әйтерһең, ғүмерен ғәзиз сабыйына ҡорбанға килтерә. Ун өсө тулыр-тулмаҫтан атаһын тиф аяҡтан йыға. Ҡорбанғәли алтын приискыһында шахтер булып эшләүсе ағаһының ғаиләһенә барып һыйына, әммә Хәлил ауылындағы мәктәптә уҡыуҙы дауам итеү әмәле ҡалмай. Ошо мәлдә Ҡорбанғәли ауыл мал-тыуарын көтөүгә лә ялланып ҡарай. Ул арала инҡилап елдәре, граждандар һуғышы ғәрәсәттәре, халыҡты уңға-һулға ҡаҡҡылап, йығылғанын — тапап, имен ҡалғандарын аяп, был тирәләрҙән шаулап уҙа. Ул афәт үтеүгә йотлоҡ әлеге дауылдарҙан ҡотола алғандарҙың муйынына йәбешә. Халыҡ себен кеүек ҡырыла, әммә яңы хөкүмәт тә яфаға буй бирергә тырышмай — иҫән ҡалған етем-еһерҙе ҡотҡарыу өсөн ҡулынан килгәнде эшләй. Шулай, Ҡорбанғәли 1921 йылда хәҙерге Баймаҡ районының Билал ауылында асылған приютҡа килеп эләгә. Ошонда биш йыл ғүмерен үткәргәс, үҫмер булып буй еткереп, Хәлилгә ҡайтып төшә. Ул инде донъя күрмәгән малай-шалай түгел, иң мөһиме — уҡый-яҙа белә. Ауыл Советы башҡарма комитетында ярты йыл самаһы сәркәтип булып эшләп тә ала.

Әйткәндәй, бөгөн совет власын тиргәүселәр уның ифрат ауыр замандарҙа ла ярлы-еһерҙең балаһын урамда ҡалдырмаҫҡа тырышыуын онотоп ебәрә. Ҡорбанғәлиҙең Өфөләге башҡорт педагогия техникумына уҡырға килеүе теләккә генә бәйләнмәгәндер — ундай саҡта дәүләт ярҙамһыҙ булмай. Ул арала отҡор һәм үткер егет Хәлилдә беренсе булып комсомолға инергә, бер нисә йәш-елкенсәкте лә үҙ артынан эйәртергә, тәүге комсомол ойошмаһын етәкләргә лә өлгөрә. Техникум егерменсе йылдарҙа етди генә белем усағы ине. Егеттең йәмәғәт эшенә сумыуы, студентлыҡҡа күсеүе алдынан бер үҙгәреш тә булып ала.

Ҡорбанғәли Ҡотлоәхмәт улы Аллабирҙин... Ауылдаштарыңдың күнегелгән теленә ике-өс ҡатлы исем ярап та торор ине. Әммә таныш-тонош урыҫ нисек әйтер? Өҫтәүенә, ә был иң мөһиме — комсомол активисына, яңы тормош тип янып йөрөгән кешегә Ҡорбан, Алла тигән

ҡушымталар хәжәт микән? Алла юҡ, тип раҫлаған бер мәлдә шул исемде тағып йөрөп булмаҫ. Егет, ауыл Советында эшләүенән файҙаланып, документтарын яңынан законлаштыра. Ғәли Әхмәт улы Бирҙин. Ҡыҫҡа, заманса һәм урыҫ теленә лә ҡулайлы. Беҙ ҙә бынан ары һүҙҙе Ғәли ағай үҙе һайлаған исем менән дауам итәбеҙ.

Эх, был тормош! Һәр таңынды байрам итеп ҡаршылап, донъяға мәңгелеккә килгән кеүек дәртләнеп йөрөгән мәлендә хыялың күгенә ҡайһы саҡ ҡара болот килеп инә. Педтехникум бөтөргән йәйҙә Ғәли органдарҙа эшләгән бер танышынан өҫтөнән сәйәси ышанысһыҙлыкта ғәйепләп яҙылған шикәйәт килеп төшөүе хаҡында хәбәр ала. Бәлки, ул имеш-мимеш кенә булғандыр, ләкин Ғәли НКВД-ға төшкән ҡағыҙҙың нимәгә әүерелеү ихтималын яҡшы аңлай һәм, әлеге танышының кәңәшен тотоп, шундуҡ төйнәлә лә, Урта Азияға юл тота.

Егерменсе йылдар аҙағы. Совет власы ундағы мосолман республикаларында баҫмасылыҡты ахырынаса баҫа алмай яфалана. Халыҡта яңы тормош ҡороу, мәғрифәт ҡайғыһы юҡ, ҡораллы көрәш бара. Наҙанлыҡтың, динден кешеләр аңы өҫтөнән тулы хакимлығы. Ғәли тәүҙә Үзбәкстандың Коканд ҡалаһына килә һәм, унда тоҡтарланмай, сик буйында уҡ ятҡан Термезға юллана. Йәш, әммә зыялы егетте Сурхандаръя өлкә халыҡ мәғарифы бүлегенә инструктор итеп алалар. Бәлки, алмаҫтар ҙа ине, ләкин үзбәктәрҙең үҙҙәрендә йүнләп уҡый-яҙа белгән кеше юҡ. Йәштәр совет власы менән хеҙмәттәшлек итеүҙән ҡурҡа, сөнки күрше Афғанстанда, сик буйында ғына, әллә нисәмә банда уңайлы форсат көтөп ята. Сүллектәрҙә тотолмаған баҫмасылар бихисап.

Ғәли Термезға килер алдынан ғына был тирәлә хәл тағы ҡатмарланып китә. 1929 йылдың март уртаһында совет сигенә яҡын Ибраһимбәк етәкселегендә 600 баҫмасы туплана. Ә Үзбәкстандың үҙендә реакцион руханиҙар “иманһыҙҙарҙан изге Бохараны азат итергә” саҡырып, өгөт-нәсихәт йәйелдерә. Апрелдә Фузаил Мәксүм атлы бәктең бандаһы Гарм ҡалаһына һөжүм итә һәм ундағы совет активын тотошлай ҡыра. Ун ике мөғәллим дә һәләк була. Ошондай шарттарҙа мәғрифәтселек йөҙөнән ҡышлаҡтарға йөрөү өсөн ҙур йөрәк кәрәк булғандыр инде. Ғәли, әлбиттә, үзбәк милли кейемендә йөрөй, кәрәк саҡта үҙен мулла тип тә атап ебәрә. Яҡын тел булғас, үзбәксә лә матур ғына һөйләшеп алып китә, Ҡөрьән Кәримде лә һәйбәт белә.

Йыл ярым Ғәлиҙән хәбәр-хәтер булмай. Шунан ул тыуған яҡтарына, дөрөҫөрәге, Магнитогорскиға ҡайтырға йөрьәт итә. Буласаҡ индустриаль гиганттың төҙөлә башлаған ғына сағы. Дәртле, тырыш, белемле йәштәр бик кәрәк. Ғәлиҙе ҡала комсомол комитетының аҙсылыҡ милләттәр секторы (шундай вазифалар ҙа булған!) мөдире итеп тәғәйенләйҙәр. Бына ул ҡолас йәйеп эшләр өсөн форсат! Әммә социалистик төҙөлөш эшендә ҡайнап йөрөү өсөн педтехникум белеме менән мәғариф тәжрибәһе генә етмәй. Тәүәккәл Ғәли Свердловск ҡалаһына барып, Урал тау институтына уҡырға инә.

Ғәли Бирҙин уҡый торһон, әлегә беҙ уның буласаҡ һөнәренә ҡағылышлы бер аҙ аңлатма биреп үтәйек. Геология фәненең ниҙәр өйрәнеүе һәм геологтарҙың ни менән шөғөлләнеүе уҡыусыға мәғлүмдер. Ул электән үк килгән һөнәр һәм беҙ уны ҡулына оҙон һаплы сүкеш тотҡан, арт-

мағына төрлө тау тоҡомдары тултырып йөрөгән кеше рәүешендә күҙ алдына килтерәбеҙ. Дөйөм алғанда һәм ҡыҫҡа ғына итеп әйткәндә, геология — Ер ҡатламының составын, төҙөлөшөн һәм уларҙың хасил булыу тарихын өйрәнеүсе фәндәр комплексы. Шул уҡ ваҡытта стратиграфия, тектоника, төбәк геологияһы, минералогия, петрография, литология, геохимия кеүек бик күп тармаҡтарҙы үҙ эсенә алһа ла, геология ҡаҙылма байлыҡтарҙы оҙаҡ ваҡыт сама менән, күҙ йомоп эҙләгән. Мәҫәлән, теоретик фаразлауҙарға ғына таянып нефть бырауланған хәлдә разведкаға бырауланған ун скважинаның берәүһе генә нефткә юлығыуы ихтимал. Аҙағыраҡ барлыҡҡа килгән геофизика фәне төрлө методтар менән, ер өҫтөнән, хатта йыһандан уҡ ер ҡуйынындағы һәм диңгеҙ төбөндәге хәлдәрҙе күрергә, унда нимәләр йәшерелгәнен белергә форсат бирә. Геология нигеҙендә тыуған фән булһа ла, геофизика уның юғарыраҡ баҫҡысын тәшкил итә һәм ҡаҙылма байлыҡтар эҙләүҙә фаразлауҙарға урын ҡалдырмай, бәлки юғары дәрәжәләге һөҙөмтәлелекте тәьмин итә.

Бирҙинға әйләнеп ҡайтырҙан алда тағы бер хәлгә иғтибарығыҙҙы йүнәлтәйем. 2002 йылда “Башнефтегеофизика” акционерҙар йәмғиәте үҙенең 70 йыллығын билдәләгәйне. Фәҡирегеҙгә шул айҡанлы бер нисә китап сығарыуҙа ҡатнашырға һәм Башҡортостанда, илдә геофизикаға нигеҙ һалыусы ветерандар менән танышырға, был ғәжәпләнерлек һөнәрҙең серҙәренә бер аҙ төшөнә башларға форсат булғайны. Аҙағыраҡ беҙ илдә генә түгел, донъяла танылған геофизик Наил Кәбир улы Юнысов менән “Беҙҙең эҙҙәр ҡалған ерҙәр” тигән китап та сығарҙыҡ. Наил ағай заманында Өфө нефть институтына уҡырға ингән, ләкин унда геологоразведка бүлеген ябырға булғас, Мәскәүгә, И.М.Губкин исемендәге нефть институтына күскән. Күсеү, әлбиттә, мәшәҡәтһеҙ үтмәгәндер, сөнки студенттарға СССР сит ил эштәре министры, ул саҡта Өфөнән Юғары Совет депутаты итеп һайланған Вячеслав Михайлович Молотовтың үҙенә хат менән мөрәжәғәт итергә тура килгән. Хәҙер бындай мөрәжәғәттәр ниндәй һөҙөмтә бирер ине икән, иллә министр Өфө студенттарының үтенесенә шундуҡ яуап биргән һәм улар баш ҡалаға күсерелгән. Бөгөнгө чиновниктарҙан ошондай иғтибарҙы көтөп булмай, ҡыҙғаныс...

Башҡортостан геофизикаһы тарихы унда нефть эҙләү тарихы менән туранан-тура бәйләнгән. Беҙҙә геофизик эштәр тәүҙәрәк, “Востокнефть” тресы менән килешеү буйынса, үҙәк ғилми-тикшеренеү институттары тарафынан башҡарылған. Ғөмүмән, Башҡортостанда геофизиканың үҫеүе һәм уны нығытыу өсөн төрлө яҡтан килгән белгестәрҙең тырышлыҡ һалыуы — үҙе бер мауыҡтырғыс тарих. Әйткәндәй, һуңғараҡ “Башнефтегеофизика” тресының тәүге управляющийы буласаҡ Василий Дмитриевич Сапожников 1937 йылда яңы ғына булдырылған сейсмик хеҙмәтте етәкләүгә тәғәйенләнгән. Ошо уҡ йылды, Урал тау институтын тамамлап, Өфөгә Ғәли Бирҙин да ҡайтып төшә.

Мин Ғәли ағайҙың геофизикала етди эшләй башлаған беренсе башҡорт инженеры булыуына шикләнмәйем. Әлбиттә, Свердловскиҙа Урал тау институтында геологлыҡҡа башҡа байтаҡ башҡорт егеттәре лә уҡыған. Мәҫәлән, Әбйәлилдән уҡытыусы Нәғимә Илһамова апай район гәзитендә

Хәлил ауылынан Хәсән Кинйәбулатов, уларҙың һабаҡташтары Бүләков, Баймурзиндар тураһында яҙып сыҡҡайны. Һәр кемдең — үҙ юлы.

Йәш инженер “Башнефть”тең геология-эҙләнеүҙәр контораһы вариометрик партияһында прораб булып эшләй башлай. Тораҡ уны электр разведкалау партияһына оператор итеп күсерәләр.

Уҡыусы гравиметрия, вариометрия, электр, сейсмик разведка кеүегерәк махсус терминдарға бигүк аптырамаһын ине. Ер ҡатламдары — ҡатмарлы структура, бихисап тау тоҡомдарынан тора. Ә һәр тоҡомдоң тығыҙлығы, физик һәм химик үҙенсәлектәре, электр импульстарын, тулҡындарҙы үткәреү һәләтлеге төрлөсә. Шуға күрә, урынына, эҙләнеүҙәрҙең ниндәй маҡсатта башҡарылыуына ҡарап, төрлө алымдар, төрлө ҡоролмалар һәм саралар ҡулланыла. Шулай ҙа, белгестәр фекеренсә, сейсмик разведка — иң емешле алым һәм ул махсус ҡоролмалар ярҙамында йә шартлатыуҙар һөҙөмтәһендә ер ҡатламын яһалма тирбәлдереү юлы менән атҡарыла.

Башҡортостанда әйләнеп ҡайтыусы тулҡын методы менән сейсмик эштәрҙе башҡарыу ике партияға йөкмәтелә. Туймазы геология-эҙләнеүҙәр контораһында ул партияға Ғәли Әхмәт улы Бирҙин, ә Ишембайҙа Василий Дмитриевич Сапожников етәкселек итә. Әйткәндәй, ошо ике кешенең 40-сы йылдарҙа Ибраһим Шәриф улы Дивеев менән төшкән фотоһы ла һаҡланған. Ибраһим ағай ҙа 1937 йылда В.В.Вахрушев исемендәге Урал тау институтын тамамлаған, тыумышы менән Горький өлкәһенән, сейсмик разведкалау партияһы начальнигы булып эшләгән.

Сейсмик партия — шаҡтай ҙур производство берәмеге. Уға эшселәр, геологтар, быраулаусылар, топографтар, операторҙар, мәғлүмәт эшкәртеүселәр, уны интерпретациялаусылар һәм башҡа кешеләр инә. Был производство цехы нефть һәм газ ятҡылыҡтарын эҙләү менән мәшғүл. Йәш инженерға сейсмик партия менән етәкселек итеү — ябай эш түгел. Уның инженерлыҡ һәм ойоштороу эше мәшәкәтле. Быға кешеләр һайлап алыу, хеҙмәт хаҡы, планды тәьмин итеү, эштең, табылған материалдарҙың сифаты, партия эш алып барған ер хужалары менән килешеүҙәр төҙөү кеүек сетерекле мәсьәләләр инә. Сейсмик разведкалау ысулы индерелә башлағас һәм уның ҡатмарлы булыуын иҫәпкә алып, Ғәли Әхмәт улын Мәскәүҙә дүрт айлыҡ курста уҡытып та ҡайтаралар. 1938 йылдың мартынан 1941 йылдың июленә ҡәҙәр Бирҙин электр разведкалау тресының сейсмик партияһы начальнигы булып эшләй.

Һуғыш геофизикты дәртләнеп эшләп йөрөгән еренән биш йылға айыра. Ғәли фронтҡа китә. Суфия еңгәй Лера һәм Флүрә исемле ҡыҙҙары менән уны оҙатып ҡала. Һуғыш юлдарын үтеп, батальон командиры урынбаҫары вазифаһында капитан дәрәжәһенә етеп, күкрәк тултырып миҙалдар тағып, Ғәли Бирҙин 1945 йылдың декабрендә әйләнеп ҡайта. Ҡайта ла йәнә сейсмик партияһында эшкә тотона. Сейсмик партия, “Башнефтегеофизика” тресының сейсмик экспедиция начальниктары булып эшләй. Ҡыҫҡаһы, утыҙ йылға яҡын ғүмерен ер ҡатламдары серҙәрен тикшереүгә арнап, 1962 йылда хаҡлы ялға сыға.

Ҡыҙғаныҫҡа күрә, Ғәли Бирҙин тураһында тәфсилләп яҙыу өсөн материалдар етеңкерәмәй. “Башнефтегеофизика” архивында илленсе йылдар уртаһына тиклемге мәғлүмәттәр генә һаҡланған. Өҫтәүенә, төрлө

сығанаҡтарҙа килтерелгән факттар, йылдар һәм даталарҙың дөрөҫлөгө шик тыуҙыра. Ағайҙан ҡалған архив балаларының, яҡын туғандарының иғтибарһыҙлығы һөҙөмтәһендә туҙҙырылып, юғалып бөткән. Һәр хәлдә, Ғәли ағайҙың ғаиләһендә үҫкән туғаны, "Башнефтегеофизика"ла эшләп, хәҙер ялда булған Гөлсирә Бирҙина апай ҡулында ярым-ярты ҡалған бер папка ғына булып сыҡты.

Гөлсирә апайҙы Ғәли Әхмәт улының ағаһы Тимербулат 1937 йылдың аҙағында Өфөгә алып килеп, ҡустыһының тәрбиәһенә ҡалдырып киткән. "Беҙ Зенцов урамындағы йортҡа килеп ингәндә, ағайым менән еңгәм киноға киткәйне, — тип хәтерләй Гөлсирә Тимербулат ҡыҙы. — Карауатта өс айлыҡ ҡына ҡыҙҙары Лера иҙрәп йоҡлап ята. Кинонан ҡайтып ингәс, ағайым мине күтәреп алды, ә инде еңгәм дә арҡамдан тапап һөйгәс, уны әсәйем һымаҡ күрҙем. Ошо көндән алып мин ағайым ғаиләһендә оло ҡыҙ булып киттем".

Суфия еңгәйҙе Ғәли ағай институтта уҡығанда осратҡан. Ул драма артисткаһы, бик сибәр туташ булған. Өйләнешкәндәр, ағай институт бөтөргән йылды ҡыҙҙары Лера тыуған. Һуғыш алдынан Флүрә исемле ҡыҙҙары донъяға килә. Еңгәй Өфөгә килгәс, театрға эшкә бармаған, бар булмышын иренең тынғыһыҙ хеҙмәтендә ярҙам итеүгә, ҙурая барыусы ғаиләне хәстәрләүгә арнаған. Лера Ғәли ҡыҙы Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған, ғүмер ахырынаса "Башнефтегеофизика"ла, дөрөҫөрәге, уның мәғлүмәттәрҙе эшкәртеү үҙәгендә геолог-геоморфолог булып эшләгән. Геоморфология — ҡоро ер, океан һәм диңгеҙҙәр төбөнөң рельефын өйрәнә торған фән. Лера апайҙы, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, 2005 йылдың йәйендә ерләнек. Уның улы һәм ике ҡыҙы ҡалды.

Ғәли Әхмәт улының икенсе ҡыҙы Флүрә Мәскәүҙә белем алған, геологияла эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡан һәм әлеге көндә Волгоградта йәшәй. Флүрә Ғәли ҡыҙының иптәше Олег — фән докторы, геолог, улдары ла геолог һөнәрен һайлаған.

Капитан Бирҙин фронттан имен-аман йөрөп ҡайтҡас, ғаиләлә тағы бер бала, улдары Таһир тыуа. Хәҙер техник фәндәр докторы Таһир Ғәли улы Бирҙин Яңы Уренгой ҡалаһында экспедиция начальнигы булып эшләй. Уның улы Азат Бирҙин да ғалим кеше, институтта уҡыта.

Хәҙер инде Ғәли Әхмәт улының ғүмерендә тәрән эҙ ҡалдырған, хатта уның холоҡ-фиғелендә мәңгелеккә уйылып ҡалған бер нәмәгә туҡталып үтәйек.

Мин бер мәл, физика-математика фәндәре докторы, академик Марат Илһамов тураһында китап яҙғанда, уның бөйөк татар композиторы Рөстәм Яхин менән яҡынлығын белеп, бер ғәжәпләнгәйнем, хәҙер геофизик яҡташымдың башҡорт сәнғәтенең аҫыл ирҙәре Ғиниәт Ушанов, Ғәйфулла Сарбаев, Заһир Исмәғилев, Арыҫлан Мөбәрәков, Батыр Вәлид һәм башҡа кешеләр менән арҡадаш булып йәшәүенә ике һоҡландым. Тегеһе лә, быныһы ла хис-тойғоларға бигүк бирелеп бармаған һөнәр халҡы бит инде. Баҡтиһәң, тамыр тамырға ялғана, бер-береһенән һут ала икән.

Әгәр рухында халҡының мәҙәниәте бар икән, кеше ҡайҙа ғына йөрөмәһен һәм низәр кисермәһен, йөрәгендә шиғриәтте, моңдо һаҡлап ҡала. Ғәли Бирҙин атаҡлы артистарыбыҙ Ғиниәт Ушанов менән Ғәйфулла Сарбаев буй еткергән төбәктә тыуған. Хоҙай уның үҙенә лә ҡәләм ҡеүәһен дә,

һүҙҙе тойомлауҙы ла, мондо ла йәлләмәй биргән. Юғарыла әйтеп үткәнемсә, беҙ студент саҡта Ғәли Бирҙиндың “Совет Башҡортостаны” гәзитендә йыш ҡына баҫыла килгән мәҡәләләрен уҡый торғайныҡ. Бына минең өҫтәлемдә яҙылып та, әллә баҫылған, әллә шул көйө ҡалған ҡулъяҙмалар ята. “Ауырлыҡтарҙы еңеп сығыу үҙе дан!” Был очерк 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының данлы яугирҙары тураһында. “Ҡатмарлы йылдар, һикәлтәле юлдар” тип аталған мәҡәләһендә автор етем үҫкән башҡорт ҡыҙы, хәрби табип Шакирә Суфиян ҡыҙы Суфиянованың тормош юлын бәйән итә. Атаҡлы ҡурайсы, бейеүсе, композитор Ғиниәт Ушановтың 70 йыллығы айҡанлы яҙылған ҙур әйбере уҡыусыларҙа әле лә ҡыҙыҡһыныу уятыр ине. Шулай уҡ ул ауылдашы, Советтар Союзы Геройы Рәүеф Дәүләтов, шағир Батыр Вәлид ижады, ауылының тәүге комсомолецтары тураһында ҡыҙыҡлы мәҡәләләр яҙып ҡалдырған. Былар геофизиктың шиғри тәбиғәтле, халҡының рухи тормошона яҡын кеше булыуы хаҡында һөйләй. Ғәли Бирҙин менән байтаҡ йылдар бергә эшләгән данлыҡлы геофизик Наил Юнысов ағайҙың сейсмик партия менән ялан эштәрендә булғанда хеҙмәттәштәрен һәр иртә йә “Азамат”ты, йә “Сибай”ҙы, йә “Бейеш”те йырлап уятыуы тураһында һөйләгәне бар. Ысындыр, сөнки Ғәли ағай матур йырлаған, музыка ҡоралдарында уйнаған.

Ғәли Бирҙин, һүҙгә тартылыуы шул ҡәҙәре лә көслө булыпмы, үҙен ижадтың ҡоласлыраҡ жанрында ла һынап ҡараған. Мин уның “Сибәғәт ташы” тип аталған романының ҡулъяҙмаһына юлыҡтым. Дөрөҫ, әҫәр әллә тамамланмаған, әллә уның бер өлөшө юғалған. Минеңсә, юғалыу фаразы хаҡтыр, сөнки роман һөйләм дә тамамланмай өҙөлгән. Әҫәрҙә һүҙ халыҡ бәхете өсөн, ер-һыуҙы талауға ҡаршы көрәшкән Сибәғәт исемле ҡыйыу егеттең яҙмышы тураһында бара. Шуныһы ла ҡыҙыҡлы, профессиональ яҙыусы ҡәләме аҫтынан сыҡмаһа ла, әҫәр ғәжәп бай телле, унда онотолоп барған матур-матур һүҙҙәр, үҙенсәлекле образдар, халыҡсан шиғри юлдар бар. Әйткәндәй, роман менән кемдер танышҡан һәм әҫәрҙе яҡшыртыу йәһәтенән уның теләктәре лә һаҡланған. Ғәли ағай “Сибәғәт ташын” драма әҫәре формаһында ла яҙып ҡараған. Уның да ҡулъяҙмаһының бер өлөшө бар. Фәҡирегеҙ Ғәли Бирҙиндың үҙ ҡулына килеп юлыҡҡан ҡулъяҙмаларын компьютерҙа йыйҙырып, рәтләп ҡуйҙы, тик уларҙы китап итеп сығарыу мәсьәләһен хәл итә алманы. Йәл. Бәлки, романдың төп геройы Сибәғәт хаҡ йырлағандыр?

Һыуҙа ла ғына балыҡ, әй, йөҙалмай,
Елберҙәкәйҙәре булмағас.
Яңғыҙ ҙа ғына егет ни хәл итһен,
Үҙ ярҙамсыҡайҙары булмағас.

Әммә минең ошо бәләкәй генә һүҙҙе икенсе йыр менән ослап ҡуяһым килде.

Бүҙәнәкәй тигән, әй, аҫыл ҡош
Юрғалайҙыр төрлө юл менән.
Маңлайҙарға яҙған хаҡ яҙмышың
Һыпырып ташлап булмай ҡул менән.

Халҡыбыҙҙың мәртәбәһен Ҡорбанғәли Ҡотлоәхмәт улы Аллабирҙин кеүек шәхестәр, уларҙың фиҙакәр хеҙмәте һәм фәһем алырлыҡ тормошо күтәрә. Өлгө һәм һабаҡ алырлыҡ яҙмыш.